**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**МКУ Отдел образования администрации МР Кигинский район РБ**

**МОБУ СОШ с. Еланлино МР Кигинский район РБ**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| Руководитель ШМО учителей начальных классов<br>______ШаиховаЛ.Н.<br>Приказ №5 от «31» 05 23 г. | Зам. директора по УВР<br>______Шарафутдинова Г. Л.<br>от «31» 08 23 г. | Директор<br>______Шаихова Р. Р.<br>Приказ №229 от «01» 09 23 г. |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

**учебного предмета «Башкирский язык как государственный язык Республики Башкортостан»**

для обучающихся 1 – 4 классов

с. Еланлино 2023

# Аңлатыу яҙмаһы

**I. Программа буйынса башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары:**

- Башҡорт теленең лексикаһын, фонетикаһын, грамматикаһы буйынса төп белемде үҙләштереү.
- Тәҡдим ителгән темалар буйынса балаларҙың һүҙлек составын арттырыу, телмәр күнекмәләрен камиллаштырыу.
- Балаларҙың оптималь уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.
- Ситуациялар, темалар буйынса һорауҙар биреү, шул һорауҙарға һүрәт, картина, текст нигеҙендә ижади яуап бирә белеү.
- Темаға тап килгән шиғырҙар ятлау, йырҙар өйрәнеү һәм башҡарыу, экскурсияларҙа, уйындарҙа ҡатнашыу, концерттар әҙерләү һәм сығыш яһау. Һәр осраҡта ла телмәр төҙөү иғтибарға алына.
- Әйтелеше ҡатмарлы булмаған һүҙҙәрҙе, ябай һөйләмдәрҙе тәүҙә күсереп, шунан яттан яҙыу.
- Һәр тема буйынса эш барышында тыуған Республика менән танышыуҙы дауам итеү.
- Башҡорт халҡына, тарихына, Башҡортостан тәбиғәтенә, сәнғәтенә, әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү.

## II. Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр

**1. Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар:**

- Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;
- Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;
- Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү, исем биреү, элементар план төҙеү;
- Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;
- Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;
- Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;
- Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур, дөрөҫ яҙа белеү;

- Өйрәтеү диктанттар яҙа белеү.

**2. Уҡытыу һөҙөмтәләренә талаптар**

**Шәхси һөҙөмтәләр:**

Башҡорт телен 1-4 класта өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә: донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү; үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу; телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү; башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

**Метапредмет һөҙөмтәләр:**

Уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;

уҡыусының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;

уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

**III. Предмет һөҙөмтәләре:**

1. Һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):

- уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;
- иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);
- текстың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.

2. Уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы һөйләшеү (говорение):

- бәләкәй күләмле текстың йөкмәткеһен һөйләү,
- һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү,
- диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү,
- үҙең, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте һ.б. тураһында һөйләү,

- ваҡиғаға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтеп биреү,
- башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.

3. Уҡыу (чтение):

- тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
- поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
- уҡыған текстың йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
- текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.

4. Яҙыу (письмо):

- хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
- ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу,
- шундай уҡ текст буйынса йә картина нигеҙендә 2-3 һорауға яуап яҙыу,
- бирелгән ситуация буйынса 2-3 һөйләмдән торған текст яҙыу,
- ныҡлы әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы контроль күсереп яҙыу, диктант яҙыу (программала күрһәтелгән нормалар күләмендә).

**IV. Универсаль уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү:**

**А. Коммуникатив сферала** (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)

**Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы**

Һөйләү телмәрендә:

- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;
- элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы.

**Тыңлап аңлауҙа:**

- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы ҙур булмаған текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы.

**Уҡыуҙа:**

- өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
- өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау,

-текстан кәрәкле информацияны табыу.

**Яҙма телмәрҙә:**

- яҙыу техникаһына эйә булыу;
- үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

**Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү)**

- башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
- төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм
- грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

**Социомәҙәни компетенция** географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының ҙур булмаған әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

**Б. Танып белеү сфераһы:**

- айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;
- башланғыс мәктәп тематикаһы кимәлендә өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү;
- ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү;
- үз-үҙеңде башланғыс класс уҡыусыһы кимәлендә баһалай белеү;

**В. Дөйөм ҡимммәттәргә йүнәлеш сфераһында:**

- башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү;

балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**- Г. Эстетик сферала:**

башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;

балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты танырға өйрәнеү.

**Д. Хеҙмәт сфераһында:**

- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

## 1-се класта уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Букварь осорона тиклем 20 сәғәт.** Әйҙәгеҙ, танышайыҡ. Башҡортостан. Беҙ-уҡыусылар. Беҙ мәктәптә. Уҡыу кәрәк-яраҡтары. Уйынсыҡтар. Беҙ һанай беләбеҙ. Ниндәй төҫ матур? Йәшелсә. Емеш-еләк. Магазинда. Ҡоштар. Тән өлөштәре. Көн режимы. Ғаиләһе. Кейем. Аяҡ кейеме. Йорт ҡоштары. Ҡырағай хайуандар. Ҡыш.

**Хәреф осоро -10 сәғәт**.Башҡорт телендә А, О хәрефтәрен дөрөҫ уҡығыҙ һәм яҙығыҙ. Дөрөҫ уҡығыҙ Һәм Башҡорт телендә Ы, Э хәрефтәрен яҙығыҙ. Дөрөҫ уҡығыҙ һәм яҙығыҙ ([α], [r]. Дөрөҫ уҡығыҙ Һәм Ҙ[ҙ] яҙығыҙ. Дөрөҫ уҡығыҙ һәм Ҡ [ҡ] яҙығыҙ. Дөрөҫ уҡығыҙ һәм Ә [ә] яҙығыҙ. Дөрөҫ уҡығыҙ һәм яҙығыҙ. Дөрөҫ уҡығыҙ Һәм Ө [ө] яҙығыҙ. Дөрөҫ уҡығыҙ Һәм Яҙығыҙ. Дөрөҫ уҡығыҙ Һәм Ү[ү] яҙығыҙ.

**Алфавит осоронан һуң 3 сәғәт**

Контроль яҙыу - 1 сәғәт

Үткәнде кабатлау - 2 сәғәт.

## 2-се класта уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

- **Танышыу - 2 сәғәт**.

**Һин кем? Һеҙ кем? Һинең исемең кем(нисек)? Һин ҡайҙа йәшәйһең? Һиңә нисә йәш? Һорауҙарына яуап биреү.** Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен (ә, һ, ң, ҙ, ү) үҙләштереү; темаға ҡараған башҡорт һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен камиллаштырыу.

- **Был мин – 2 сәғәт.**

Кешенең организмы, тән өлөштәре атамаларын үҙләштереү, тәнде таҙа тотоу, һаулыҡты һаҡлау. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен (ҡ) үҙләштереү. **Минең**, **һинең, уның** алмаштарының мәғәнәләренә төшөнөү, уларҙы ҡулланып (ауырта-ауыртмай) һөйләмдәр төҙөү.

- **Минең ғаиләм – 3 сәғәт**.

Үҙенең ғаиләһе, ғаилә ағзалары, уларҙың эштәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте тураһында һөйләшеү. Башҡорт телендә эйәлек ялғауҙарын практик үҙләштереү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен (ғ, ө) үҙләштереү. Нимә эшләй? һорауына яуап биреү.

4. **Мин нимә яратам? – 2 сәғәт**.

Үҙең, үҙеңдең ғаилә ағзалары, уларҙың эштәре, тураһында һөйләшеү. Башҡорт милли аштары тураһында һөйләшеү. Аш-һыу приборҙары һүҙҙәрен ҡулланып (нимә менән?) һөйләмдәр төҙөү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен (ҫ) үҙләштереү.

5. **Минең мәктәбем– 2 сәғәт.**

Балаларҙың үҙҙәре уҡыған мәктәп, уның үҙенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, кабинеттарын белеүе. Һүҙҙәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе. Ниндәй? һорауына яуап биреү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Диалог төҙөргә өйрәнеү.

6. **Минең класым – 1 сәғәт.**

Мәктәп, класс бүлмәләре, дәрестәр, кластағы уҡыусылар, уларҙың эштәре. Темаға ҡараған һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Өндәү һәм һорау һөйләмдәр. Ниндәй? һорауына яуап биреү.

7. **Мин мәктәпкә йыйынам – 1 сәғәт.**

Мәктәп, класс бүлмәләре, дәрестәр, кластағы уҡыусылар. Уларҙың эштәре. Һөйләмдәр төҙөү, уҡыу, һөйләү.

- **Мин уҡыусы – 1 сәғәт.** Диалог.

Мин мәктәпкә йыйынам. Кроссворд. Нисек? һорауына яуап биреү.

- **Мин дәрестә - 2 сәғәт.**

Текст. Минең дуҫым. Һүрәтле текст. Артур мәктәпкә бара. Ҡайҙа? һорауына яуап биреү. Эргәһендә-в (предлог), внутри мәғәнәһен үҙләштереү. Ҡайҙа? Өҫтөндә-на(педлог), аҫтында-под (предлог) мәғәнәләрен үҙләштереү.

**10. Мин дәрестән сыҡтым– 4 сәғәт.** Сюжетлы һүрәттәр. Түңәрәктәр. Беҙ түңәрәккә йөрөйбөҙ. Тәнәфестә. Алинаның көн тәртибе. Нимә эшләйем? һорауына яуап биреү. План буйынса һорауҙарға яуап биреү, һөйләү. Башҡорт теленең специфик өндәренең әйтелешен һәм яҙылышын өйрәтеү.

**11. Минең уйынсыҡтарым – 3 сәғәт.**

Уйынсыҡтар магазины. Сюжетлы һүрәттәр. Тиҙҙән Яңы йыл етә. Тәртип ҡағиҙәләре. Нимә? Нимәләр? Ниндәй? һорауҙарына яуап биреү. Бәйләнешле текст, диалог төҙөү. Нимә эшләйбеҙ? Нимә эшләмәйбеҙ? һорауҙарына яуап биреү. Тексттың йөмәткеһә өҫтөндә эш. Нимә эшләмә? һорауына яуап биреү. Һорауҙарға таянып бәйләнешле текст төҙөү.

**12. Мин уйнарға яратам – 1 сәғәт.**

Сюжетлы һүрәттәр. Ҡышҡы уйындар. Беҙҙең катокта. Нимә эшләйбеҙ? һорауына яуап биреү. Тексттың йөмәткеһе өҫтөндә эш. Бәйләнешле текст, диалог төҙөү.

**13. Мин уйнарға сығам – 2 сәғәт.**

Һүрәтле текст. Миңә нимә кәрәк? һорауына яуап биреү. Кәрәк, кәрәкмәй һүҙҙәрен үҙләштереү.

**14. Мин уйнарға сыҡтым – 2 сәғәт.** Картина. Башҡорт өндәрен һәм хәрефтәрен дөрөҫ уҡыу, яҙыу. Нисәнсе? һорауына яуап биреү. Картинаны тасуирлау.

**15. Минең кескәй дуҫтарым – 2 сәғәт.** Сюжетлы һүрәттәр. Халыҡ ижады. Текст. Тест һорауҙары. Был нимә? Ниндәй? һорауҙарына яуап биреү. План буйынса һорауҙарға яуап биреү, бәйләнешле текст төҙөү.

**16. Мин ял итәм - 2 сәғәт.**

Сюжетлы һүрәттәр. Хайуандар тураһында әкиәттәр. Ҡайҙа? Ҡайҙан? Ҡасан? һорауҙарына яуап биреү. План буйынса һорауҙарға яуап биреү, бәйләнешле

текст төҙөү. Был нимә?Нимәгә? һорауҙарына яуап биреү. Һорауҙарға таянып бәйләнешле текст төҙөү.

**17. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау - 4 сәғәт**

Һүрәтле текст. Таблица. Сюжетлы һүрәттәр, картина. Тәүлекте, ваҡытты сәғәттәрҙә билдәләү. Ҡасан? Нимә менән? һорауҙарына яуап биреү. Таблица тултырыу (Үҙем Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен дөрөҫ билдәләү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. менән алам. Өйҙә ҡалдырам.). Нимә эшләйбеҙ? һорауына яуап биреү. Сюжетлы һүрәттәр буйынса хикәйә (текст-Лагерҙа көн тәртибе.).

**3-сө класта уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

| Тема | Сәғәт | Йөкмәткеһе |
|---|---|---|
| **1. һаумы, мәктәп!**<br>1) Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | **1 сәғәт** | Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы, таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, иман тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу.<br>Башҡорт телендә өндәрҙең, хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. *Ярай, ярамай, мөмкин* һүҙҙәренең ҡулланышын активлаштырыу. |
| **2. Мин танышам**<br>2) һин кем?<br>3) һин ҡайҙа йәшәйһең?<br>4-6) һин ҡайҙан? | **5 сәғәт** | Иҫәнләшеү. Танышыу диалогы. Һин ҡайҙан? Һиңә нисә йәш? Һинең туғандарың бармы? (Сәнғәтле һөйләшеү.)<br>Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре. Хат яҙыу. |
| **3. Мин белем алам**<br>7—8) Был нимә? Бармы?<br>9-10) Нимәһеҙ? | **4 сәғәт** | Мәктәптә белем алыу, класс бүлмәһе, дуҫлыҡ, берҙәмлек тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу. |
| **4. Мин һәм минең ғаиләм** | **3 сәғәт** | Ғаилә ағҙалары, уларҙың үҙеңә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Был атамаларҙы |

| | | |
|---|---|---|
| 11) Кем? Нимә эшләй?<br>12-13) Нимә эшләргә тейеш? | | үҙләштереү. Темаға бәйләнешле яҡындарҙың эш-шөғөлдәре, уй-хыялдары, киләсәккә пландары. Ғаилә шәжәрәһе, уның әһәмиәте хаҡында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.<br>Башҡорт телендә бойороҡ һәм шарт һөйкәлеше. Уларҙың формаларын телмәрҙә ҡулланыу. Яҙыу һәм һөйләү күнекмәләрен ҡамиллаштырыу. |
| **5. Мин һөнәр һайлайым**<br>14—15) Кем ҡайҙа эшләй? | **2 сәғәт** | Һөнәр атамалары, таныш һәм яҡын кешеләрҙең шөғөл-һөнәрҙәре, уларҙың яҡшы сифаттары тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.<br>Туғанлыҡ мөнәсәбәттәре.Уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.<br>Башҡорт телендә теләк мәғәнәһенең бирелеше, ул формаларҙы практик үҙләштереү. *Булып эшләй* һүҙбәйләнешен ҡулланыу. |
| **6. Мин тәбиғәтте яратам**<br>16-17) Нимәләр? Нимә эшләйҙәр? | **2 сәғәт** | Кеше һәм тәбиғәт. Башҡортостан тәбиғәте. Беҙҙә йәшәгән кейектәр, үҫемлектәр, бөжәктәр. Кешенең уларға мөнәсәбәте. Тәбиғәткә һаҡсыллыҡ тураһында һөйләшеүҙәр.<br>Башҡорт телендә синоним һүҙҙәрҙе сағыштырыу, ҡылымдарҙың заман формаларын, ҡаршы ҡуйыу теркәүестәрен практик үҙләштереү. Телмәр күнекмәләрен ҡамиллаштырыу. |
| **7. Минең яраткан** миҙгелем.<br>18-20) Нимә? Нимә эшләй?<br>21-22) Минең яраткан миҙгелем. | **5 сәғәт** | Башҡортостанда, үҙебеҙ йәшәгән төйәктә көҙ, ҡыш, яҙ, йәй миҙгелдәре, уларҙың билдәләре. Тәбиғәттең төрлө күренештәре. Миҙгелдәргә ярашлы балаларҙың эштәре, уйындары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр, һынамыштар менән танышыу.<br>Көн торошона бәйле һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу, телмәр күнекмәләрен |

| | | |
|---|---|---|
| | | үҫтереү, һөйләм төрҙәре. Тасүирлау элементтары. |
| **8. Минең гардеробым**<br>23-26)<br>Ниндәй? | **4 сәғәт** | Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр береһен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, тыйнаҡлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау.<br>Башҡорт телендәге йөкмәтеү йүнәлешен, шарт һөйкәлешен практик үҙләштереү.<br>Был формаларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Матур теләктәр әйтергә өйрәтеү. |
| **9. Минең тыуған көнөм**<br>27-29) Ҡасан? | **3 сәғәт** | Балаларҙың тыуған көн байрамы, уға әҙерлек мәшәкәттәре. Тыуған көн байрамын үткәреү әолаһы. Ҡунаҡтар саҡырыу, уларға хөрмәт күрһәтеү, мәжлестә үҙеңде тотоу тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу, шиғырҙар ятлау.Итәғәтлелек нормаларын үҙләштереү.<br>Башҡорт телендәге бойороҡ, теләк һөйкәлеше формаларын практик үҙләштереү.Әҙәплелек нормаларын белдереүсе һүҙҙәр һәм һөйләмдәр. Саҡырыу ҡағыҙы, ҡотлау. |
| **10. Мин сәйәхәтсе**<br>30-33) Нимә менән? Нисек? | **4 сәғәт** | Сәйәхәт, уның кешегә файҙаһы, әһәмиәте, сәйәхәт урындары, йүнәлештәре, спорт һәм сыныҡыу тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.<br>Килеш ялғауһары, кире ҡағыу формаларын *менән* бәйләүесен телмәрҙәҡулланыу. |
| **11. Ҡабатлау**<br>34) | **1 сәғәт** | Уҡыу йылы буйынса өйрәнелгәндәрҙе ҡабатлау, белгәндәрҙе ҡабатлау, белгәндәрҙе тәрәнәйтеү, һүҙлекте байытыу. Телмәр күнекмәләренҡамиллаштырыу. |

**4-се класта уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**1. Көндә мәктәпкә барам (7 с.)** 3-се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өн һәм хәрефтәре. Белем алыу, уҡыу темаһына ҡағылышлы һүҙҙәрҙе белеү, грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Исәнләшеү. Танышыу диалогы.  Һин ҡайҙан? Һиңә нисә йәш? Һинең туғандарың бармы? (Сәнғәтле һөйләшеү.) Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы,таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу.Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре. Башҡорт телендә исем. Уның аңлатҡан мәғәнәләре. Берлек һәм күплек мәғәнәләре. Шул мәғәнәләрҙе белдереүсе саралар(ялғауҙар). Әҫәрҙең темаһын төп фекерен билдәләү күнекмәләре Һөйләм. Һөйләм төрҙәре.  Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.

**2. Минең ғаиләләмде яратам (6с.)** Ғаилә ағҙалары, уларҙың үҙеңә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Был атамаларҙы үҙләштереү. Темаға бәйләнешле яҡындарҙың эш-шөгөлдәре, уй-хыялдары, киләсәккә пландары. Ғаилә шәжәрәһе. Сифат. Антонимдар.Сифат дәрәжәләре. Сифаттың дәрәжә менән үҙгәрешен практик күҙәтеү. Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы.

**3. Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем(5с.)** Йәшәгән Ер, йорт/район. Был атамаларҙы үҙләштереү. Күршеләр, яратҡан урындар темаһына ҡағылышлы һүҙҙәрҙе белеү. Алмаш . Зат алмаштарын практик ҡулланырға өйрәтеү. Текстан кәрәкле урындарҙы һайлап уҡыу. Иптәшең йәки үҙең яҙғандарҙы камиллаштырыу өҫтөндә эште дауам итеү.Күрһәтеү алмаштары. Эйәлек заты алмаштары.

**4. Ауылда /ҡалала йәшәйем (6 с.)** Тыуған ауыл/ҡала.Ауыл/ҡала тормошо. Ҡалалағы һәм ауылдағы эштәр. Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары. Тыуған ер мөғжизәләре. Был атамаларҙы үҙләштереү. Башҡортостандың ҡалалары тураһында әҫәрҙәр уҡыу, белешмәләр алыу һәм һөйләү.  Һан һәм уның төркөмсәләрен практик үҙләштереү. Цифрҙар менән бирелгән һандарҙы һәм уларҙың ялғауҙарын дөрөҫ яҙыу күнекмәләре биреү. Автобиографияны һөйләү һәм яҙыу күнекмәләрен формалаштырыу.

**5. Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ (3с.)** Кеше һәм тәбиғәт. Башҡортостан тәбиғәте. Беҙҙә йәшәгән кейектәр, үҫемлектәр, бөжәктәр. Кешенең уларға мөнәсәбәте. Йыл миҙгелдәре. Тәбиғәттең төрлө күренештәре. Миҙгелдәргә ярашлы балаларҙың эштәре, уйындары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр, һынамыштар менән танышыу. Рәүеш . Рәүеш аңлатҡан мәғәнәләрҙе практик үҙләштереү.

**6. Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ (2с.)**

Балалар тормошондағы ҡыҙыҡлы хәлдәр, хыялдары, кумирҙары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу.Мажаралар илендә. Ҡылым. Уның зат, һан, заман, барлыҡ-юҡлыҡ мәғәнәләре. Текстан образлылыҡ сараларын һайлап ала белеү һәм уларҙы ҡулланыу. Иптәшеңдең яҙғанын тикшереү һәм камиллаштырыу күнекмәләре.

**8. Һатып алырға өйрәнәм(5с.)** Бюджет.Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр береһен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, тыйнаҡлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау, белемдәрҙе системалаштырыу.